*Зәкиә МЫРҘАҒОЛОВА,*
*БДУ доценты*

# Ожмахтарҙың асыҡ ҡапҡаһы

## (Мәхмүт бине Ғәлиҙең «Нәһж әл-фәрадис» әҫәренең художество үҙенсәлектәре)

Мәхмүт бине Ғәли XIV быуат төрки әҙәбиәтенең күренекле вәкиле, дин белгесе. Уның хаҡында мәғлүмәттәр күп түгел. Әҙиптең тормошо, эшмәкәрлеге хаҡында беҙҙең көндәргә килеп еткән әҫәре — «Нәһж әл-фәрадис» тексынан бер ни тиклем мәғлүмәт алырға мөмкин. Мәҫәлән, ул Һарай ҡалаһында йәшәгән, ижад иткән, Болғар ҡалаһында тыуған. «Нәһж әл-фәрадис» әҫәренең төп нөсхәһе һаҡланмаған, күсермәләре Башҡортостан, Татарстан республикаларында табылған. Әҫәр күсермәләре бөгөнгө көндә Санкт-Петербург Көнсығышты өйрәнеү институты архивында, Төркиәлә, Ҡазанда Ғ.Ибраһимов исемендәге Тел, әҙәбиәт һәм сәнғәт институты архивында һаҡлана.

Төркиәләге күсермә (1360 йылғы) иң боронғоһо иҫәпләнә, ул Стамбул ҡалаһындағы «Яңы Жәми» мәсете китапханаһында табылған. 1956 йылда был күсермә Төркиә ғалимы Янош Экман тарафынан нәшриәттә баҫтырып сығарылған. Төркиә күсермәһендә Мәхмүт бине Ғәлиҙең 1360 йылдың 22 мартында вафат булыуы тураһында хәбәр ителә. Яҙма ҡомартҡы башҡорт һәм татар әҙәбиәтсе һәм телсе ғалимдары хеҙмәттәрендә бер ни тиклем яҡтыртылыш тапты [1; 3; 4; 5].

«Нәһж әл-фәрадис» — дини-дидактик характерҙағы сәсмә әҫәр. Әҙип үҙен был китапта «жәмиғ ҡылыусы» тип атай. Автор 21 күренекле ислам дине белгестәренең әҫәрҙәренә нигеҙләнеп, үҙенсәлекле хеҙмәт яҙған. Ғилми китап ҡанундарына ярашлы, әҙип үҙе таянған, файҙаланған хеҙмәттәрҙең исемлеген әҫәр һуңында килтерә. «Нәһж әл-фәрадис» әҫәре композицион йәһәттән ислам дине хеҙмәттәре традицияһын һаҡлай. Әҫәр өс өлөштән — моҡҡадимә (инеш), төп өлөш һәм хәтимәнән тора. Инештә автор әҫәрҙең яҙылыу маҡсатын әйтә. Төп өлөш бөтәһе дүрт бабҡа бүленгән. Һәр баб үҙе унар фасыл — бүлексәнән тора. Әҫәрҙә бөтәһе ҡырҡ фасыл бар. Китаптың ошо рәүешле төҙөлөүен автор Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең ҡырҡ хәҙисенә нигеҙләнеүе менән аңлата. Урта быуаттарҙа Көнсығыш, төрки әҙәбиәттәрендә пәйғәмбәрҙең хәҙистәренә комментарий биргән хеҙмәттәр яҙыу киң тарала. Заманында Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең ҡырҡ хәҙисен башҡаларға өйрәтеү ғалимлыҡ сифаты һаналған, бындай хеҙмәт ижад итеүселәр тура ожмахҡа әләгә, тип ышанғандар. Ошондай китаптарҙың иң абруйлылары мәсет-мәҙрәсәләрҙә уҡыу әсбабы булып киткән. Мәхмүт бине Ғәлиҙең дә «Нәһж әл-фәрадис» китабы Урал-Иҙел төбәге мосолмандарының популяр дини дәреслегенә әүерелгән. Әҙип хеҙмәтенең инеш өлөшөндә әҫәрҙең төҙөлөшө үҙенсәлеген үҙе үк аңлатып биргән: «Тәкый бу китапны төрт баб үҙә ҡылдыҡ. Тәғмә бер фасыл әүвәлендә бер хәҙис килтердүк, пәйгәмбәр хәдисләредин кем, мәжмугы кырык хәдис булыр. Әүвәл бабы пәйгамбәр фазаиленең бәйаны эчендә торыр. Икинч бабы хөләфа рәшидин, тәкый әһли бәйт һәм төрт имам фазаиленең бәйаны эчендә

торыр. Учинч бабы Хак Тәгалә хәзрәтенә йавунгу изге ғәмәлләр бәйаны эчендә торыр. Төртинчи бабы Хак Тәғәлә хәзрәтедин ыратту йавыз ғәмәлләр бәйаны эчендә торыр» [2, 17—18]. Китаптың «Нәһж әл-фәрадис» тигән атамаһы «Ожмахтарҙың асыҡ ҡапҡаһы» тигән мәғәнәне бирә. Әҙип был китапты уҡығандар китапса ғәмәл ҡылырҙар, ожмахҡа эләгерҙәр тигән өмөт менән ижад иткән. Һәр фасыл хәҙистән башлана. Башта хәҙис ғәрәп телендә килтерелә, шунан тәржемәһе бирелә. Фасылдың ҡалған йөкмәткеһен килтерелгән хәҙискә аңлатма биреү ала. Аңлатмаларында автор дини китаптарҙан, тормоштан алынған хикмәтле, ғибрәтле хикәйәттәргә таяна. Ошондай композицион төҙөлөш бөтә бүлектәр өсөн дә хас.

Алда билдәләп китеүебеҙсә, китаптың беренсе бабында Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең тормошон һәм эшмәкәрлеген тасуирлап үтеү төп маҡсат булып тора. Бүлектә пәйғәмбәр тормошонан киң билдәле хәл-ваҡиғаларҙан иң әһәмиәтлеләре генә һайлап алынған. Мажаралы, мистик һәм тарихи-биографик хәл-ваҡиғалар бергә уҡмаштырылып, Мөхәммәт пәйғәмбәр ғәләйһи әс-сәләмдең дини-сәйәси эшмәкәрлеген, уның шәхеслек портретын һәр яҡлап асыуға йүнәлтелгән. Ул бер яҡтан итәғәтле, әҙәпле, матур күңелле ябай инсан булараҡ һүрәтләнһә, икенсе яҡтан ғәжәйеп кирамәт көстәргә эйә илаһи зат булараҡ та һынланыш ала. Мөхәммәт пәйғәмбәр күрһәткән мөғжизәләр автор тарафынан Алла ҡөҙрәте булараҡ баһалана. Аҙ ғына ризыҡтың меңләгән кеше ашаһа ла һис кәмемәүе, Ҡәғбәгә ислам дине дошмандарының бер нисек тә үтеп керә алмауы ваҡиғаларын һүрәтләү аша автор Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең хаҡ юлда Алла ҡурсауында булыуын күрһәтә. Бүлектә хәл-ваҡиғалар тик мажараларҙан ғына тормай. Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең ислам динен илдәр, халыҡтар араһында таратыуҙа ҡаты ҡаршылыҡтарға осрауы, күптәрҙең ҡорбан китеүе реаль, драматик төҫтәрҙә һүрәтләнеш таба.

Әҙип көнөнә биш тапҡыр намаҙ уҡыу, ураҙа тотоу, хажға барыу кеүек ислам дине тәртиптәренең төҙөлөүе, ҡабул ителеүе процесын яҡтыртыуға етди иғтибар бирә. Әҫәрҙә һүрәтләнеүенсә, был тәртиптәр теҙмәһе Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең ете күк ҡатына сәйәхәте ваҡытында Ибраһим, Ғайса, Муса һәм башҡа пәйғәмбәрҙәр менән осрашып фекерләшеүе, Алла менән әңгәмәләшеүе һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән.

Мөхәммәттең ожмахҡа һәм тамуҡҡа сәйәхәтен тасуирлау аша автор уның пәйғәмбәрлек һәм рәсүллек вазифаһының асылын, маҡсатын, бурыстарын төшөндөрә. Мәҫәлән, тамуҡтың ҡаты ғазаптарына алдашҡан, ғәйбәт һөйләгән, ришүәт алған, зина ҡылған, йәнә ике йөҙлө әҙәмдәр эләккәнен һүрәтләү менән әҙип изгеләр алдында кешеләрҙе әхлаҡи йәһәттән таҙартыу, уларҙы хаҡ юлға әйҙәү кеүек оло бурыстар тороуын күрһәтә. Ошо рәүешле икенсе бабта һүҙ барасаҡ Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең фекерҙәштәре булған тәүге хәлифтәр, изге сәхибәләр эшмәкәрлеге асылын, әһәмиәтен тулыһынса күҙ алдына баҫтырыу өсөн аныҡ йүнәлеш бирелә. Беренсе, икенсе бабтарҙа изге шәхестәр тормошо һәм эшмәкәрлеге хаҡында һүҙ барыу сәбәпле, автор хикәйәләүҙә кеселеклелек, итәғәтлелек һаҡлаһа, өсөнсө һәм дүртенсе бабтарҙа иһә ул ҡәтғи, талапсан тәрбиәсе-моралист, үткер публицист сифатында сығыш яһай. Был авторҙың китап уҡыусыларға Аллаға яҡынайтыусы (өсөнсө баб) һәм дә унан алыҫлатыусы ғәмәлдәрҙе (дүртенсе баб) ныҡлап төшөндөрөүҙе үҙенең әҙиплек бурысы тип иҫәпләүе менән аңлатылалыр. Ул изге ғәмәлдәрҙең изгелеген, кире ғәмәлдәрҙең насарлығын төшөндөрөү өсөн бик күп аргументтар килтерә. Бында әҙиптең әхлаҡи проблемаға ҡағылышлы сығанаҡтарҙы төплө өйрәнеүен, дини-дидактик хеҙмәт ижад итеүҙә үҙенсәлекле үҙ методикаһын булдырыуын билдәләп үтергә кәрәк.

Беҙ әҫәрҙә һәр төрлө мифик, реаль-тарихи образдар менән осрашабыҙ. Уларҙың ҡабатланмаҫ үҙ йөҙҙәре, холоҡтары бар. Автор йыш ҡына персонаждарының

үҙенсәлекле портретын да бирә. Күп осраҡта тышҡы портрет образдарҙың эске торошон асыуға йүнәлтелә. Мәҫәлән, Мөхәммәт пәйғәмбәрҙе ул бер нисә урында «матур йөҙлө», «мөбәрәк йөҙлө», «йөҙө асыҡ» кеүек һүҙҙәр менән һүрәтләй. Уның тулы портреты былай бирелә: «күрекле йөҙлө, татлы һүҙле, урта буйлы... һимеҙ түгел, ябыҡ түгел, бик хәрәкәтсән, тештәре һирәк, йөҙө тулған айҙай балҡый...» [2, 36]. Автор геройҙарының кейем-һалымдарына ла иғтибарлы. Ғүмәр хәлифтең тышҡы ҡиәфәте түбәндәгесә сағылыш таба: «Эй, бабам, бу жомгага ыракдин, якындин укуш сәхибәләр килгәй, туныгыз йугун суфдин иске торыр, укуш йамаглары бар» [2, 104]. Йәғни, бында Ғүмәрҙең ҡалын йөндән эшләнгән, күп ямауҙан торған бик иҫке кейемдә булыуы һүрәтләнә. «Нәһж әл-фәрадис» әҫәре образдарҙың психологик кисерештәр байлығында һүрәтләнеше йәһәтенән осорҙоң башҡа әҫәрҙәренән айырылып тора. Автор геройҙарҙың янып-көйөүҙәрен, ҡыуаныстарын баҙыҡ буяуҙар менән тасуирлай. Мәҫәлән, шул уҡ Ғүмәрҙең Абу Бәкерҙең вафат булыуын ишетеп ҡайғырыуы былай һүрәтләнә: «...тәкый укуш йыглады... бихуш булды, мөнбәр үзә йыгылды. Сәхәбәләр күтәрделәр, мөнбәрдән төшөрделәр, тәкый эвенгә күтәреп иләттеләр. Жомга намазын кылу белмәде» [2, 104].

Икенсе бер персонаждың хәл-торошо һүрәтләнешенә иғтибар итәйек: «Нәжаши күзендин катарат вә габарат күз йәшләре ага башлады. Андан соң сабыры-карары калмады...» [2, 82—83]. Ошо рәүешле образдарҙың уй-кисерештәре, рухи тороштары һүрәтләнеше уҡыусыны битараф ҡалдырмай, ул геройҙар менән бергә борсола, көйөнә, һөйөнә.

Әҫәрҙә уҡыусыға эмоциональ тәьҫир яһауҙың бер нисә алымын күҙәтергә мөмкин. Автор кешеләрҙең ҡурҡыу, һоҡланыу кеүек тойғоларына йыш баҫым яһай. Был бигерәк тә ожмахты һәм тамуҡты тасуирлаған картиналарҙа асыҡ сағыла. Ожмахты әҙип ләззәтләнеп китеп, тәмләп һүрәтләй: шишмәләре һөттәй аҡ, балдай татлы, ә уның ярҙарында ынйыташ, яҡут, зөбәржәт ҡуббалар бар, бик күп алтын-көмөш һауыт-һабалар ҡуйылған... [2, 68]. Әлбиттә, бындай мөғжизәле донъяға изге ғәмәлдәр атҡарып ҡына әләгергә мөмкин. Тамуҡ, киреһенсә, ҡот осҡос ҡурҡыныс һүрәттә һынланыш ала. Әҙәм балаһы, унда барып ҡапмаҫ өсөн, был тормошта гонаһлыҡтар ҡылыуҙан бик ныҡ ҡурҡырға тейеш.

Мәхмүт бине Ғәлиҙең «Нәһж әл-фәрадис» әҫәре — ислам дине тарихы һәм теорияһы буйынса бай мәғлүмәттәр туплаған, сағыу иллюстрациялар менән байытылған энциклопедик характерҙағы әһәмиәтле хеҙмәт. Шул уҡ ваҡытта ул үҙенең идея-эстетик тәбиғәте, художество үҙенсәлектәре йәһәтенән урта быуаттар төрки әҙәбиәтенең күркәм бер ҡаҙанышы дәрәжәһенә лә дәғүә итә.

Һүҙ аҙағында шуны ла әйтеп үтеү кәрәктер: «Нәһж әл-фәрадис» китабын башҡорт телендә матур итеп баҫтырып сығарыу оло бер эш булыр ине.

### Әҙәбиәт


1. *Абилов Ш.* О новонайденных списках памятника XIV века «Нахдж ал-фарадис» // Советская тюркология. — 1977. №2. С.69—73.

2. *Мәхмүд әл-Болгари.* Нәһжел-фәрадис / Әсәрне басмага әзерләүче Ф.Нуриева. — Қазан: Татар. кит. нәшр., 2002. 384 бит.

3. *Наджип Э.* О памятнике XIV века «Нахдж ал-фарадис» и его языке // Советская тюркология. — 1971. №6. С.56—89.

4. *Нәҙерғолов М.* Мәхмүт бине Ғәли. «Нәһж әл-фәрадис» // Башҡорт әҙәбиәте антологияһы. Ике томда. 1 том. — Өфө: Китап, 1999. 207—208-се биттәр.

5. *Нуриева Ф.* «Нахдж ал-фарадис» Махмуда ал-Булгари. — Қазань: Фән, 1999.